Ауыл хакимиәтенең һәм Советының эше һәм 131 –се "Рәсәй федерацияһында урындағы үҙидараны ойошторороуҙың дөйөм принциптары тураһында" ғы федераль законға, Уставҡа таянып башҡарыла һәм ауыл биләмәһе эсендәге мәсъәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтелгән.

Ауыл **Советының 2020 йылғы эшмәкәрлеге:**

Былтырғы йылда 7 ултырыш (2-һе өйгә йөрөтөп) үтеп, түбәндәге мәсъәләләр буйынса ҡарарҙар ҡабул ителгән:

- Ауыл Советының регламентын ҡабул итеү;
- Муниципаль милек менән идара итеү комитеты менән килешеү төҙөшөү;
- Бюджетҡа үҙгәрештәр индереү;
- Төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен ҡабул итеү;
- Уставҡа үҙгәрештәр индереү;
- муниципаль норматив хоҡуҡи акттарҙың реестрын алып барыу тәртибе тураһында;
- муниципаль норматив хоҡуҡи акттарға мониторинг үткәреү;
- муниципаль милектең иҫәбен һәм ресстрын алып барыу;
- яңы барлыҡҡа килгән урамдарға, тыҡрыҡтарға исем биреү тәртибе тураһында;
- юл фондын булдырыу;
- староста тураһында положение ҡабул итеү;
- бюджет ҡабул итеү;
- район хакимиәте менән килешеүҙәр төҙөшөү.

Депутаттарҙың эшмәкәрлеге буйынса:

- депутаттар ултырыштарҙа ҡатнашырға тырышалар. Ҡалдырһаларҙа, етди сәбәп менән генә ҡалдыралар. Эшмәкәрлектәренә килгәндә, былтырғы йылда күренерлек эш күрһәтмәнеләр. Тәүге ултырышта ла әйтелде уларға, үҙ округының халҡы менән эшләргә, эш алып барырға, етешһеҙлектәр булһа хакимиәт менән кәңәшләшеп, бергә башҡарырға кәңәш итәм.

Хакимиәт.

Хакимиәт урындағы мәсъәләләрҙе хәл итә, Федераль закондар һәм Башҡортостан Республикаһы закондары тарафынан тапшырылған айырым дәүләт вәләкәттәрен үтәү буйынса буйынса эштәр башҡара, ҡарарҙар, бойороҡтар ҡабул итә.

Шулай уҡ халыҡҡа түбәндәге хеҙмәттәрҙе күрһәтә:

- хужалыҡ китаптарына таянып белешмәләр, күсермәләр биреү;
- торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса иҫәпкә ҡуйыу;
- торлаҡ шарттары буйынса акттар төҙөү һәм характеристика биреү;
- объекттарға адрестар биреү, үҙгәртеү, ғәмәлдән сығарыу.
- Был хеҙмәттәр административ регламенттарға таянып башҡарыла.

Нотариат буйынса түләүле хеҙмәттәр күрһәтелә, ышаныс ҡағыҙы яҙҙырыу, күсермәләрҙе һәм ҡултамғаларҙы раҫлау буйынса эш алып барыла.

2020 йылда хакимиәт башлығы исеменә хакимиәт хеҙмәткәрҙәренән генә бөтәһе 10 ғариза ҡабул ителеп, ыңғай хәл ителгән.

Ауыл биләмәһендә билдәле даталарҙы, байрамдарҙы билдәләп үтеү буйынса саралар үткәрелеп тора. Был сараларҙы үткәреүҙә ауылдағы шәхси эшҡыуарҙар, крәҫтиән-фермер хужалығы етәкселәре бағымсылыҡ күрһәтәләр.

<u>Демографик күрһәткестәр:</u>

	2019	*2020*
Халыҡ һаны	493	481
Тыуым	8	12
Никах	2	6
Үлем осрағы	4	4
Эшһеҙҙәр һаны	68	86
Пенсия йәшендәгеләр	72	77
Күп балалы ғаиләләр-	20 5 бала м-н- 2, 4 бала м-н- 8, 3 бала м/н – 10	20 5 бала м-н - 4 4 бала м-н - 4 3 бала м-н 12 ғаилә

иҫәпләнә

Хужалыҡтар һаны - 134 136

Мал һаны:

	2019	***2020***
Эре мөгөҙлө малдар	588	570
Кәҙә, һарыҡ	432	357
Аттар	101	79
Ҡош-ҡорт	1942	1939
Ҡорт ғаиләләре	73	87

Хужалыҡтар һәм ойошмалар буйынса

Ауыл биләмәһендә 3 крәҫтиән-фермер хужалығы һәм 4 шәхси эшҡыуар теркәлеп, эш алып баралар.

1) Крәҫтиән- фермер хужалыҡтарында
   39 баш эре мөгөҙлө мал, 10 баш йылҡы иҫәпләнә.
2) Ойошмалар:
   - Әтек филилалы мәктәбе,
   - Балалар баҡсаһы,
   - Мәҙәниәт йорто,
   - Ауыл китапханаһы,
   - Фельдшерлыҡ пункты,
   - Почта бүлексәһе,
   - 4 шәхси эшҡыуарҙың магазины эшләп тора, почта бүлексәһендә лә көнкүреш тауарҙары һатыла.
   -

Социаль хеҙмәткәр Алгазина Фирүзә оло йәштәге 7 кешене ҡарай. Тағы ла өҫтәп 6 оло кеше, 2 баланы алырға документтар йүнләгән.

Йәмәғәт ойошмаларына килгәндә, улар тарҡалып бөтөү өҫтөндә. Бөтәһендә яңынан һайлап ҡуйыр кәрәк. Был ойошмаларҙың сотавы буйынса һеҙҙең тәҡдимдәрҙе көтөп ҡалабыҙ.

<u>Программаларҙа ҡатнашыу:</u>

Урындағы инициативаларҙы үҫтереү прогрраммаһында мәҙәниәт йортоноң иҙәндәренә капиталь ремонт проекты менән ҡатнашып, конкурстан үттек.

Был эште ауыл фермеры Азат Баймөхәмәтов үҫ өҫтөнә алып, сифатлы итеп башҡарып сыҡты. Уға һәм уның биргадаһына ҙур рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ.

Аныҡ эштәр программаһы буйынса мәктәптең 10 тәҙрәһе евро тәҙрәләргә алыштырылды. Коллектив уларҙы үҙ көсө менән ултыртты.

<u>Янғын хәүефһеҙлеге:</u>

Ауыл биләмәһендә, һәр өйҙә янғын хәүефһеҙлеген иҫкәртеү, һаҡланыу сараларын булдырыу мөһим. Был йүнәлештә йыйылыш һайын тәҡдимдәр еткерелеп тора, иҫкәрмәләр таратыла, күп балалы ғаиләләргә, эскелек менән мауыҡҡандарға йөрөп сыҡтыҡ. Был эш быйылғы йылда ла дауам итәсәк. Республика ла янғын осраҡтары йыш теркәлә, унда кешеләрҙең һәләк булыуы кәмемәй.

Һәр өйҙә янғынды иҫкәртеүсе прибор булһын тибеҙ. 2017 йылдан алып ғариза нигеҙендә күп балалы ғаиләләргә. 2018 йылдан балаһы тыуған һәр

ғаиләгә бирелә килә. 2019 йылда 55 йәштән үткән 25, 2020 йылда 8 яңғыҙ йәшәгән граждандарға һәм 7 йәшкәсә балаһы булған 14 ғаиләгә ҡуйылды һәм ул артабан да дауам итә.

Извещателдең батарейкаһын алыштырып торорға онотмағыҙ. Көсө бөткән уның, тип алып һалып ҡуйған ғаиләләрҙә булды, ҡарап йөрөгәндә.

Янғын сығыуына юл ҡуймаҫҡа, уны иҫкәртеү, һаҡланыу сараларын алдан күрергә саҡырам. Бәләкәй балаларға ҡарата иғтибарлы булығыҙ, яңғыҙ йәшәгән туғандарығыҙҙы, күршеләрегеҙҙе лә күҙ уңынан ысҡындырмағыҙ.

Шулай уҡ, яҙ, йәй көндәрендә урмандар янып китә. Урманда йөрөгәндә лә янғынға ҡаршы ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәргә кәрәк.

Урамдарҙы яҡтыртыу:

Бөгөнгө көндә ауыл урамдарын 41 лампочка яҡтырта. Сафтан сыҡҡандарын алыштырып торабыҙ. Ауылда электрик булмауы ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

Ҡыш көнө урамдарҙы ҡарҙан таҙартыу буйынса йылда КФХ етәксеһе Гадамшин Райман менән килешеү төҙөшәбеҙ. Ул ваҡытында үҙ эшен башҡара.

Көнкүреш ҡалдыҡтары буйынса:

Ауылда 3 урында контейнер майҙансыҡтары ултыртылды. Аҙнаның һәр шишәмбеһе машина килеп алып китеп тора. Был аҙнанан аҙнаһына ике тапҡыр киләсәк машина, хаҡы шул килеш ҡала. Ҡыйҙы ситкә ташламай, туҙҙырмай, тәртипле генә итеп һалып, контейнерҙың ҡапҡастарын ябып китеүегеҙ һорала.

Был контейнерҙар тормош көнкүреш ҡалдыҡтары өсөн генә тәғәйенләгән. Кирбес, ағас ботаҡтары һалыусыларҙа булды тәүге осорҙа. Уларҙы машина тейәмәй, шул килеш ҡалдыра ла китә.

Күсемһеҙ милек буйынса:

Пай ерҙәрен йүнләп алмағандар буйынса тағы судҡа йөрөй башланыҡ. Алырға теләмәгәндәр отказ яҙа, теләгәндәр минең менән судҡа барырға тейеш. Мәрхүм туғандарыныҡы менәндә шундай хәл.

Өйҙәренә документ алмаған 76 хужалыҡтың 19-ҙы Баймаҡ БТИ-һы аша алды. Атай-әсәйҙәре мәрхүм булып, ерҙәре, өйҙәре оформить ителмәгәндәр ҡалды. Улар документ эшләтеүҙе нотариус аша башлайҙар.

Былтырғы йыл Республикабыҙҙа эстетика, йәғни матурлыҡ, таҙалыҡ йылы тип иғлан ителде.

Бәләкәй салажынан алып ауылға тиклем оло юл буйына, Ҡана йылғаһы буйына өмәләр ойошторолдо. Ойошторолған өмәләргә халыҡ йөрөмәй, битараф ҡала. Йылға буйҙарында, түштә бура бураусылар, бура ултырған

ерҙе, һеҙ бураны алғансы, ваҡытлыса арендаға алып торорға тейешһегеҙ. Шулай уҡ уның эргә –тирәһен таҙа тоторға бурыслыһығыҙ. Пилорам тотҡандарға ла ҡағыла былар.

Йылға буйынса утын ташып, туҙҙырып һалып ҡуйсыларҙа бар. Улар ҙа ошо ҡағиҙәләрҙе үтәргә тейеш. Шулай уҡ урам да йорт алдарына таҡта өйөп ҡумағыҙ.

Тағы ла "Йәшел Башҡортостан" акцияһы сиктәрендә аллеяға ҡороғандары урынына шыршылар, бөтөрөлгән ҡый түгеү урынына ҡарағай үҫентеләре ултыртылды.

Бюджет үтәлеше буйынса:

Килем өлөшө дөйөм 2785110, 88 һум тәшкил итә, үтәлеш 102,8 %;
- ошо сумма эсендә дотация 1495200 һум.;
- хәрби иҫәп алып барыу өсөн 80642 һум федераль бюджеттан күскән;
- юлдарҙы төҙөкләндереү өсөн акциз- 10000 һум;
- кире ҡайтарылмай торған, муниципаль райондан ингән килем – 245756.9 һум;
- биләмәнең налогтарҙан, дәүләт пошлиналарынан йыйылған үҙ килеме- 263511,98 һум, үтәлеш 147 %;
- биләмә территорияһын төҙөкләндереү, контейнер майҙансыҡтары ултыртыу, контейнерҙар алыу өсөн республика бюджетынан ингән килем 700000 һум.

Тотоноу өлөшө:
-Хакимиәт хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡтары һәм уға өҫтәлгән сумма, больничныйҙарға түләү- 1695110 һум;
-хәрби иҫәп алып барыу, концелярия тауарҙары алыу өсөн -80642 h.;
- бәйләнеш һәм интернетҡа- 45502,8 h.,
- компьютер программаларын яңыртыу өсөн- 9800 h.,
- 15500 h. яңы принтер алынды.
- картриджҙарҙы алыштырыу, заправкалауға- 5310 h.,
- контораның электроэнергияһына түләү – 2767,91 h.,
- көнкүреш ҡалдыҡтарына түләү – 4984,32 h.,
- машинаны страховкалау – 4148,93 h.,
- гәзиткә яҙылыу, иғландар биреүгә- 9910,74 h.,
- утын алдырылған- 7000 h.,
- ГСМ-ға – 63083,04 h.,
-флагтар алдырҙыҡ – 5920 h.,
- биләмәлә саралар үткәреүгә, оло йәштәге юбилярҙарҙы ҡотлауға, бүләктәр алыу өсөн- 4000 h.,
- хакимиәттең милек һәм транспорт һалымын түләү өсөн- 13926,29 h.,

- юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса акциз 10000 h. тотонолманы;
- Хакимиәткә хужалыҡ һәм канцелярия тауарҙары алыу, машинаға запас частәр алыуға – 30210 h.
- янғын хәүефһеҙлеге өсөн 16 мең ҡаралған, 5 меңенә тракторға яғылыҡ алынды, ҡалғаны тотонолманы;

Республика бюджетынан күскән 700000 h. аҡса:

- ҡар һөрөүгә- 186400 h., былтырғы йылға тулыһынса һәм, йыл аҙағында быйылғы йыл өсөн күсерелде;
- Дуҫлыҡ урамына ҡырсынташ түгеүгә 73600 h.,
- Контейнер майҙансыҡтары алдына өҫтәп ҡырсынташ түгеүгә- 64732;
- Түбәндә барлыҡҡа килгән мусоросвалканы таҙартыу өсөн – 40000 h., өҫтәп бер контейнер майҙансығы урынлаштырылды, 9 контейнер алынды- 162302 h.;
- Урамдарҙы яҡтыртҡан өсөн – 45286 h.,
- Баҙаналарға лампалар, светильник, кронштейн алыу- 50380 h.,
- Урамдарҙы яҡтыртыу өсөн ағымдағы ремонт эштәренә – 15000 h.,
- Зыяратҡа мәғлүмәт стенды эшләтеү- 9000 h.,
- Контейнер майҙансыҡтарына мәғлүмәт стендтары эшләтеү – 3300 h.

Быларҙан тыш ауыл мәктәбендә район кимәлендә балалар һәм үҫмерҙәр араһында милли көрәш буйынса Алдар батыр турниры ойоштороп, юғары кимәлдә үтте. Бында райондың балалар һәм үҫмерҙәр мәктәбе тренеры Ямгурсин Артур инициатива күрһәтте, Ҡоролтай депутаты Айнур Илгиз улы һәм ауыл эшҡыуарҙары ҙур спонсор ярҙамы күрһәттеләр.

Башҡортостан региональ бүлексәһенең Берҙәм Рәсәй партияһы бүлгән аҡсаға обелисккa косметик ремонт эшләнелде.

Шәхси эшҡыуар Таңсулпан Баймөхәмәтова мал һуйыу майҙансығы булдырҙы.

Тағы бер мәсъәләгә туҡталып китәм.Үткән йылдың көҙ айында ҡорт ғаиләләрен урлау осрағы теркәлде. Урлаусылар табылманы. Шуға күрә ауылдан ситтә ултырған бесән, бура булһынмы үҙегеҙҙең милеккә үҙегеҙ күҙ -ҡолаҡ булығыҙ. Мөмкинселегегеҙ булһа камералар алып ҡуйырға була.

Үткән йылғы отчет йыйылышындағы һорауҙар буйынса:

1) Әтек- Иҫке Собханғол юлына капиталь ремонт - эшләнелмәне,
2) Кәрәҙле телефон буйынса, МТС бәйләнеше булдырылды;

3) Хусаинов Фуатың ике өй араһына ултыртҡан бура араһы дөрөҫ тип билдәләне Белорет һәм Бөрйән райондарының ерҙе һаҡлау һәм тотоноу буйынса дәүләт инспекторы Ильфат Хисматуллин.

Быйылғы йыл сәләмәтлек һәм әүҙем оҙон ғүмерлелек йылы тип иғлан ителде.

Ауыл халҡына сәләмәт тормош алып барырға, ауырыуҙарҙан һаҡланыу сараларын күрергә саҡырам.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.

Артабан һүҙҙе үҙҙәренеәң отчеты менән сығыш яһау өсөн ойошма етәкселәренә бирәм.

Иҫке Собханғол дөйөм белем биреү мәктәбенең Әтек филиалы һәм мәктәпкәсә йәштәге төркөмө. Етәксеһе Кужубаев З.С.

Әтек мәктәбе буйынса ҡыҫҡаса мәғлүмәт

Хөрмәтле Венера Фәрит ҡыҙы, райондан килгә вәкилдәр, ауылдаштар. Мин үҙемдең сығышымда мәктәп һәм балалар баҡсаһы буйынса ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреп китәм. Әтек мәктәбендә 2020 йылда бөтәһе 62 уҡыусы белем алды. Бөтәһе 13 уҡытыусы һәм 10 техник хеҙмәткәр эшләне. Беҙҙең мәктәптең төп бурысы булып уҡыусыларыбыҙға төплө белем биреү һәм 9-сы класты уңышлы тамамлап ҡулдарына аттестат биреп сығарыу тора. 2020 йылда 9-сы класс булманы, сөнки 2 уҡыусы тороп ҡалғандан һуң улар Собханғол мәктәбендә уҡыҙарын дауам иттеләр.

Уҡыу йылы башынан алынған йүнәлеш буйынса эшләп киләбеҙ. Ошо планға ярашлы йыл дауамында бик күп эштәр башҡарыла. Район күләмендә үткән төрлө конкурстарҙа, олимпиадаларҙа уҡыусыларыбыҙҙа һәм уҡытыусыларыбыҙҙа әүҙем ҡатнашып төрлө кимәлдә үткән конкурстарҙа, спорт ярыштарында призлы урындар яуланыҡ (һәр береһен һанап китһәк оҙаҡ була). История, физкультура, биология, башҡорт теле һәм башланғыс кластар буйынса (фәндәренән) үткән олимпиадала уҡысыларыбыҙ призер һәм еңеүсе булдылар.

Апрель айынан алып май аҙағына тиклем дистанционный уҡыу форматына күстек. Бында ата-әсәләргә ҙур рәхмәт һүҙҙәрен еткереп китәбеҙ, сөнки уларҙың ярҙамы менән уҡыу йылын уңышлы тамамлай алдыҡ.

Мәктәптә төрлө кружоктар һәм спорт секциялары эшләп килде. Был кружоктарға уҡыусылар теләп йөрөйҙәр. Түңәрәк етәкселәре үҙҙәре етәкләгән түңәрәктәренә яуаплы ҡаранылар һәм уҡыусыларҙы йәлеп иттеләр. Үҙҙәренең йүнәлештәре буйынса булған район һәм дә республика күләмендә үткән конкурстарҙа призлы урындар алдылар.(БыныҢ буйынса һәр береһенә туҡтала башлаһаҡ бик оҙаҡҡа китә, шуға күрә бер нисәүһен генә әйтеп үтәм.)

Февраль айында мәктәптә, район күләмендә “Алдар батыр” турнирына арналған көрәш үтте. Көрәштә мәктәп уҡыусылары ла ҡатнашып үҙҙәренең категорияларында урындар яуланылар, команда икенсе урын алды. Етәкселәре Хәкимов Зәйнулла Сәғәҙәт улы. Байморатова Гөлсибәр республика күләмендә үткән “Башкирский народный эпос “Урал батыр” – достояние человечества конкурсында 3-сө дәрәжәле диплом менән бүләкләнде. Етәксеһе Исламова З.Ф.

Район буйынса “Йыл уҡытыусыһы – 2020” конкурсында музыка уҡытыусыһы Исламова Зөлфиә Фәйзулла ҡыҙы үҙ көсөн һынаны һәм “Иң яҡшы оҫталыҡ дәресе” номинацияһында еңеү яуланы.

Район буйынса старт алған “Йырлаусы ауыл” бәйгеһендә мәктәп уҡыусылары менән уҡытыусылары, балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре лә әүҙем ҡатнаштылар. Үҙҙәренең моңло йырҙары менән концертҡа йәм өҫтәнеләр. “Тамсыҡай” вокал ансамбле ҡыҙҙары 1-се урын яуланылар. Етәкселәре Исламова З.Ф.

Йыл да үткәрелеп килгән “Еҙ үксә” бейеү конкурсында Роза Рәүеф ҡыҙы етәкләгән “Гөлнәзирә” бейеү ансамбле ҡыҙҙары ҡатнашып 2 –се урын яуланылар һәм яңғыҙ башҡарыусылар араһында Биембәтова Ғәҙилә “Өмөт” номинацияһында еңеү яуланы.

Фәнни эҙләнеү эше буйынса ла йылдың йылы төрлө темалар өҫтөндә эшләп урындар яулайбыҙ.

Апрель айынан алып уҡыу йылы бөткәнсе уҡыу дистанцион форматта алып барылған осорҙа уҡыусылар менән онлайн форматта үткән бик күп конкурстарҙа, сараларҙа актив ҡатнаштылар, дипломдар, сертификаттар алдылар.

Мәктәп уҡыусылары һәм уҡытыусылары, балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре, ауыл клубы хеҙмәткәрҙәре тығыҙ бәйләнештә әүҙем эшләп киләбеҙ.

Йылда уҡыу йылы аҙағында мәктәпкә ремонт эшләнелә, яңы уҡыу йылына әҙерләйбеҙ. 2020 йылда мәктәпте һәм балалар баксаһын яңы уҡыу йылына әҙерләү буйынса 3 урын алдыҡ.

Реалный дела программаһы буйынса бүленгән аксаға мәктәпкә 10 евро тәҙрә ҡуйылды.

Йылда көтөп алған Яңы йыл байрамын үткәреүгә ярҙам күрһәткән ауылыбыҙҙың шәхси эшҡыуарҙарыбыҙға рәхмәтлебеҙ. Улар ошо байрамды үткәреүгә үҙ өлөштәрен индерҙеләр.

Проблемаларҙа юҡ тугел бар. Беренсенән мәктәптә компьютерҙарҙың ныҡ иҫке булыуы, мебелдәрҙең иҫкереүе, Интерактив таҡталарҙың булмауы бөгөнгө көн, заман талабы менән тура килеп етмәй тип әйтәм.

Икенсе проблемаларыбыз булып мәктәп буйынса тулыһынса электр проводтарын һәм светельниктарҙы алыштырыу талап ителә, сөнки улар пожарниктарҙың талаптарына тура килмәй, иҫкереп сроктары сыҡҡан. Пожарниктар тарафынан предпесаниеларҙа яҙылды.

Иҫке Собханғол мәктәбенең Әтек филиалының
мәктәпкәсә йәштәге төркөмөнөң 2020 йылға отчеты

Әтек балалар баҡсаһы 2015 йылдан Әтек филиалына ҡушылып мәктәпкәсә йәштәге төркөм булып иҫәпләнә. Балалалар баҡсаһында 2 тәрбиәсе, 1 тәрбиәсе ярҙамсыһы, 1 музыка етәксеһе, 2 ут яғыусы штаты эшләп килә.

Төркөм 35 балаға иҫәпләнһә лә, 2020 йылда карантинға ябылыу һәм йәйге ремонтта тоткарлыктар булыу сәбәпле балаларҙың йөрөү һаны кәмене. Иҫке Собханғол мәктәбенә ҡараған балалар баҡсаһы араһында иң күп йөрөгән балалар булып иҫәпләнеп килде. Әлеге ваҡытта ата-әсәләр балаларын йөрөтә башланылар.

Мәктәпкәсә йәштәге төркөм йыллыҡ эшен планға ярашлы үтәп килә.

Йылда бинаға косметик ремонт үткәрелеп торола. Йылда комиссия тарафынан эшебеҙ ыңғай баһалана. Уйын майҙансығын төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр башҡарылды: беседка, ҡапҡа яңыртылды, йыл һайын үҙ көстәре менән балаларға уйын һәм хәрәкәт өсөн төрлө ҡоролмаларҙы яңыртып торалар, сәскәләр үҫтерәләр. «Белем үҫтереү» дәүләт программаһына ярашлы 2020 йылда соландағы келәтте котелныйға әйләндереп котел ҡуйылды мейестәр алып ташланып торбалар үткәрелде, бүлмәләр һәм иҙәндәр йылып ҡалды.

ФГОС талаптарына ярашлы эшмәкәрлек - уйын мөхитен тулыландырып кухня, дауахана, матурлыҡ мөйөшө, ИЗО, эксперимент, физкультура инвентары, математиканан дидактик ҡулланма алынды.

Район кимәлендә һәм Иҫке Собханғол мәктәпкәсә төркөмдәре араһындағы сараларҙа актив ҡатнашып, призлы урындар алалар.

Беҙ бинаның эсен заманға ярашлы яңы йыһаздар менән тулыландырырға тырыштыҡ, киләсәктә уйын майҙансығына ла яңы заман талаптарына ярашлы йыһаздар булырына өмөтләнеп йәшәп ятабыҙ.

Проблема булып баҡсалагы уйын майзансығын заманга ярашлы инвентарҙар менан тулыландырыу тора. Сөнки бөгөнгө көндә үҙҙәренең ҡулдары менән эшләнелгән уйын майҙансығы ғына эшләп килә, улар яңы талаптарға тура килеп етмәй.

Ауыл фельдшерлык һәм акушерлык пункты
Фельдшер Янбердина Л.А.



Фельдшерский пункт.
Территория халыкка һәм – 419, шуны эшләгән – 18 яшьтән түбән – 119.
0 – 4 яшьтә булган – 30
1 яшьтә булган – 12
5-9 яшьтә булган – 41
10-14 яшьтә булган – 31
15-17 яшьтә булган (әлегә үсмерләр) – 17
Шуны һәлләгән кешеләр – 207, өлкәннәр – 93.
Кайтып киткәннәр – 145, шуны эшләгән фершитель йөгерә катнашкан – 72.
Үткән елда фәнни 3720 кеше мәрәҗәгать иткән һәм өлкәннәр арасында Вирусларга – 1710. Балаларга прививкаларны мәктәп яшенә кадәр эшләнгән; Апрель аенда вакцина белән торган, кәнәшләр сөйләнгән. Шулай ук авырулар: дифтерия м-н столбняк – 18 кешегә, грипп 80 кешегә, тән төсләре прививкасы 21 кешегә эшләнгән. Инвалидлар һәм – 12 (I гр. – 1 бер бөтәнләй, II-III гр. – 11 кеш.) работа эшләүчеләр бөтәнләй. Өйдә ятып 2 кешегә инвалидлык бирелгән. Инвалидлар балалар – 3 кеш, өлкәннәр 1 бер булган. Диспансеризация бөтәнләй:
Онкология сәбәпләр арасында бөтә ун үзгәрмәгән. Кан ин скрытую кровь һәм биохимия – 31 кешегә эшләнгән. Бишек балалар бөтәнләй – 1 кеше белән эшләнгән.

госпиталь урны катты диспансеризация сыныгыларга 23 кеши чыгыштыр сыныгылары. Предприятиеләрдә микроскоп 2 водительләр урынбасарлыгы мәктәп вәкилләре урынбасарлыгы. Аннан хәлиләрдә вәкилләр на урынбасарлыгы бәйләнеш. Мәктәп вәкилләре белән осмотры - 77 таныгыз, хәлиләрдә - 21 кешене алдык.

Кыскы флюорографиягә безнең авылны кертелмәде. Район үзәгенә барыр вакытта прием үткәрә алмыйлар, перегрузка булган.

Яңа 2008 елдан инде рентгенны урнаштырабыз. Врачлар шунда; аларга комнаталарны әзерләп бирәбез. 1982 елда бурылган, 1986 елда сарык инфекциясе ул. Яшәгән, кыйбат сыйлы-урынга торгызыр, бәлки бизнес оештыр.

Әйтергә кирәк бүтән нәрсә: хәлиләр белән 3 елга бер урынларны диспансеризациядә отрыгып кейә алмый (ул 40 елны чыгып кешеләр профосмотр). Шул яңа тигезләмә кәрәкмәгән урын кирәк. Бәлки ул чыгыш бәхәсләр: новерны вакыт бәйләнешләр. Ул 1 кешене генә кертәрләр. Әгәр кемнәрдә: ничә кеше кертергә кирәклеген.

Бетчы рен-ия урынлар:

2003, 2002, 1987, 1984, 1981, 1988, 1985, 1982, 1981

Кем 40 л- елгарак.

Кем ия спр. арты а б/х:

Мемлекәт:

1981, 1978, 1977, 1975, 1973, 1971, 1968, 1967, 1965, 1963, 1961, 1958, 1957, 1956, 1955, 1954, 1953, 1952, 1951, 1950, 1949, 1948, 1947, 1946.

Ауыл мәҙәниәт йорто. Етәксеһе Баймөхәмәтова Д.А.

Хөрмәтле ҡыҫ ауылдаштар!
Хөрмәтле ҡыҫ хөрмәтле президиум!

Этек мәҙәниәт йортоноң йәмле ҡыҫҡаса отчеты.

2020 йылды ауыл мәҙәниәт йорто ҙур эштәр менән башлап ебәрҙе.
Мәҫәлән: „Йәшел шыршы янында" балалар менән ҡыҙыҡлы уйындар „Онытылмаҫ йомаҡтары" - исемле кичә, балаларҙың һәм йәштәрҙең яратып уйнаған „Дьяволо" уйынды, йәштәр менән музыкаль программа „Карлаоке", „Кошҡа бизәнәр" ҡурҡ конкурсы, викториналар „Ысын дуҫтар кемдәр була", „Ҡаҙаҡ бесәнгә дуҫтар", „Карантин - 2020", „Ҡәлдеҙ бесәйгә ҡыҙ ҡаҡҡан" - исемле ҡыҙыҡлы конкурстар үтте.
Шулай уҡ „Эх бәйрәмдәр бәйрәмдәр", „Самауыр шәкәрәй - бәйрәм горлеҡ" исемле ҡурҡмалы матур бәйрәмдәр үткәрелде.
Республика буйынса барған „Йәрмәуес ауыл" конкурсында „Таҡмасай" балалар вокал ансамбле (е. з. Исламово), „Алмасай" ҡатын-ҡыҙҙар вокал ансамбле. район мәҙәниәт хәрәкәтендә Ғәлә- конкурсында, шулай уҡ районда үткән „Тыуған ил, башҡорт ил - Тыуған тел, башҡорт тел" йәйге асыу концертында „Алмасай" ҡатын-ҡыҙҙар вокал ансамбле менән, ер ҡуҡы ҡәнәфе, Ҡыҙылаҡ, 9,100 аҡса, Зилһәр, Бөтә аҡсалар ремонт-эшләр яратҡа, кв. тов-ҡа Апрель айында онлайн формат- менән башланып тотонолдо.
97 ~~Бөтәсе~~ Төрлө анкеталар, фильмдар һәм конкурстарҙа ~~ҡатнаштық~~ викторина, фото-рәсәм альбомдарҙа ҡатнаштық.
45 Республиканский анкеталарҙа ҡатнашҡанбыҙ),
Бөйөк ТТМИЕ проектында өсөн клубтың эшмәкәрлеге эйәшеп фундаментын ҡуйырҙан эшләнеп.
Бер нәмә Б. Назат ҡәҙәстәрҙе алып, үҙебеҙгә ауыл ергәнәрҙе менән аймаҡлы ергәнәрҙе, ошо ҡәҙәстәрҙе уларға ҡарамаҡлы итебеҙҙе белдерәбеҙ.
2019-20 йылдың эш нәҙәлтәрәнә ҡарап мәҙәниәт бүлегенә компьютер менән бүлешмәк.

„Лучший учреждение культуры" - тиҙ республ-ий конкурста ҡатнашып 100 мең ҡаҙаҡ һәм шул иҫәбенән фольклор коллективына 10 башҡорт ҡыҙҙе, уҙ ҡолҙоҙ тәҡәрәлде. Шулай уҡ торло саралар ~~уҙ~~ үҙе ҙур ҙур ҡыҙыҡлы ҡурыҡтар ойоштороу-ҙа спонсор ярҙамы ~~ярҙамбеҙҙе белдерҙеҡ~~.

Б. Азат ағай улы-, Б. Таҙсулпан ҡаҙмай ҡыҙы-, Шибаева Нурҙиҙ Ҡәмитр-иф ҡыҙы-, Ҡаҙитов Рәшит ҡәшнәй улы-, Черков Станислав Александр улы-, Ғәҙәшин Рәхман Рамазан улы-, 3 округ депутаты Ямаев Хәйит Ғәйит улы-, һәм ҡорҙаш йәмғиәттәрҙе Бүләбетов Ноҫур Ишҡар улы-ҙы ҙур рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Эйәрендә уҡытыусылар, ҡонаҡлар, ваҡыт бәйле телгәбеҙ.

Ауыл ктапханаһы. Китапханасы Баймөхәмәтова А.Һ.

Әтек ауылы китапханаһы

Китап фонды 7671. Матбуғат баҫмаларынан Таң,Йәшлек ,Киске Өфө,Башкортостан гәзите , журналдарҙан Аманат, Башкортостан ҡыҙы, Шоңкар, Тамаша алдырабыз һәм йыл буйына тупланып барыла.

темалар буйынса бирелгән Справкалар һаны 521

Китап уҡыусылар һаны- 239

Әтек ауылы китапханаһының (вк)бәйләнеш селтәре булдырылған һәм ошо селтәргә барлығы 1564 дуҫтар теркәлгән, һәр үткән саралар унда сағылдырылып барыла .

2020 йылда яҙыусы, шағирҙарҙың, билдәле шәхестәрҙең юбилейҙарына, иҫтәлекле даталарға күргәҙмәләр эшләп куйылды әңгәмә , кисәләр Һ.б онлайн форматта саралар үтте.

2020 йыл хәтер һәм дан йылына арнап мәктәпкәсә йәштәге балалар арһында «Сыңлай Олатайым миҙалдары» шиғыр һөйләүселәр конкурсы , "Бөйөк Ватан һуғышы минең ғаиләм тарихында" исемле конкурс Видео презентация , "Тормошҡа юл","Блокаданың бер көнө" батырлыҡ дәрестәре ,онлайн- викторина "Мәңге онотолмаҫ йылдар" һәм "Үлемһеҙ полк" исемле акция онлайн форматта үтте.

Китапханала Уҡыусыларөсөн "Шат йондоҙҙар", оло йәштәгеләр өсөн "Ағинәйҙәр" һәм Йәнгузәл ҡыҙыҡһыныусылар клубы ойоштороған. Февраль айындаБөрйән "Вики-клубы"н Ҡотлобаева Көнһылыу Зәки ҡыҙы һәм Ғиззәтуллина Рәшиҙә Хәй ҡыҙы менән осрашыуҙар утте. Рәшиҙәапай Ғизәтуллина етәкселегендә үткән "Сергетыш" проектында Агинәйзәр клубы катнашып ат биҙәү әйберҙәре (конная амуниция) комплектынан һәм сергетыштарҙан күргәҙмә эшлап район буйынса 2 се урын алды һәм һәр сараларҙа әузем катнашкан өсөн киске Өфө гәзитенен баш мөхәррире Гөлфиә Янбаеваның "Рәхмәт хаты"на лайык булды. Ә "Йәнгүзәл" клубы район кимәлендә үткән "Йырлаусы ауыл " конкурсында катнашы 2 се урын алды. был беззен апай ,инәйзәргә рәхмәт әйтергә һәм уларҙың оҫталығына Дәртле унганлыгына һоҡланырға ғына ҡала.

Ҡышкы Каникул вакытында уҡыусылар менән "Ҡоштар беҙҙен дуҫтар" "Ҡышҡы биҙәктәр" һүрәт тошороу, Ҡарһылыу - 2020 " конкурстары,уҡыусыларҙың яратып уйнаған "Әлләсе" өҫтәл

уйындары, башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың һәм яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның тыуыуына 115 йыл тулыу айҡанлы, уның ижады һәм тормош юлы менән таныштырып, әҙәби дәрестәр утте.

"Эх быймаһы ла быймаһы" исемле Самауыр байрамдары бик кунелле утте.

Бөтә Рәсәй мәҙәниәт сиктәрендә үткән "Китапхана төнө","Театр төнө" "Сәнғәт төнө - 2020"акцияларында ҡатнашып
"Тыуған ауылым тәбиғәте" исемле виртуаль сәйәхәттәр , "Тыуған ергә һөйөү" һүрәт төшөрөү конкурсы "Ауыл данлы оҫталары менән!" исемле күргәҙмәләрзе онлайн форматта уткәрзек.

Республика күләмендә үткән, акцияларҙа, конкурстарҙа, флешмобтарҙан ауыл китапханаһыла ситтә калманы. китапхана һәм китап укыусылар катнашып бик куп кенә диплом һәм сертификаттар алыуға өлгәштек.

Әтек ауылы китапханаһы узенен бәйләнеш селтәрендә Республика көнөнә карата "Тыуған ерем гүзәллеге" тип исемләнгән фотобәйге, Халыҡ-ара Әсә көнө уңайынан "Әсәйем,кәҙерлем!"шигри конкурс, викторина уйындар, ОНЛАЙН ФОТО АКЦИИ "Гаилә менә укыйбыз", Халыҡ - ара балаларҙы яҡлау көнөнә арнап #Мин китап #уҡырғаяратам акцияһы, олололар конона арнап флешмоб "Өләсәйем әкиәттәре", #Конкурс#Эко_шыршы h.б акциялар ойошторзо.Ошо конкурста катнашыусыларға буләктәр бирелеп дипломдар, һәм электрон сертификаттар ебәрелде.

Һәр үткән сараларҙа ҡатнашҡан Әтек ауылы мәктәбе укытыусыларына һәм укыусларга уларҙың ата - әсәләренә ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәм.

Почта бүлексәһе. Етәксеһе Хәкимова Р.Г.

ПОЧТА

2020 йылда Әтек ауыл почтаһынан бөтәһе 26 посылка, 18 заказной хат киткән.

Подписка буйынса:

- "Таң" гәзите – 110 шт
- "Йәшлек" гәзите – 82 шт
- "Башҡортостан Йома" гәзите -10 шт
- "Башҡортостан уҡытыусыһы" -19 шт
- Һәм башҡа изданиеларҙы (Шоңҡар, Ағиҙел, Непоседа, Аҡбуҙат, Киске Өфө) алдырыусылар бүлды.

Сентябрь айынан гәзит-журналдарға яҙылыуға 20-25 % ташламалы хаҡтар аҙналығы үтеп торҙо.

Халыҡҡа шулай уҡ көнкүреш тауарҙары тәҡдим ителде.

Страховкалар эшләнде:

- "Защита дома" -2 шт
- "Антиклещ" -5 шт
- "Джуниор" -1 шт